*Гөлсирә ҒАЙСАРОВА*

# Артылғанда ғүмер үрҙәрен

Кеше ғүмере... Сабый тыуа, үҫә, алдына маҡсаттар ҡуя, үрҙәргә артыла, ҡосағына тотош донъяны һыйҙырырҙай ҡомһоҙ дәрт менән йәшәй. Хыялдар һәм уларҙы ғәмәл ҡылыу, байлыҡ, ихтирам, дәрәжә, исемдәр... Барыһы ла ифрат мөһим тойола. Әммә ниндәйҙер мәлдә, кемгәлер иртәрәк, кемгәлер һуң, иң төп ҡиммәттәрҙе аңлау килә. Әҙәм балаһы өсөн иң кәрәк сифаттарҙы аңлау килә. Ул да булһа — кешелеклелек, итәғәт, башҡаларға ихтирам. Халыҡтың бер йырында бик фәһемле юлдар бар:

Үткән ғүмер менән ҡалған хәтер
Һатып алам ғына тиһәң дә табылмаҫ.


*Зиннур Ғәзиз улы Ураксин*

Унда теләктәрҙе ғәмәлгә ашырғанда, маҡсаттарға ынтылғанда аңлапмы, аңламаймы юлында осраған кешеләрҙең хәтерҙәрен ҡалдырыу хаҡында һүҙ бара, минеңсә.

Филология фәндәре докторы. Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының ғәмәли ағзаһы, академик. Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы вице-президенты. Төрки лингвистика йәмғиәте ағзаһы (Турк дили курумы). Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының тел бүлеге мөдире. Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған фән эшмәкәре. БР Яҙыусылар союзы ағзаһы. Республикабыҙҙа ғына түгел, сит илдәрҙә лә танылған ғалим Зиннур Ғәзиз улы Ураҡсиндың ҡаҙаныштарын күрһәткән был вазифа һәм исемдәрҙе һанағанда уға зыялылыҡтың нигеҙе булған иң ҡиммәтле сифаттарҙың береһе — кешелеклелекте һеңдергән ябай ауыл ҡатынын күҙ алдына килтерҙем. Зиннур Ғәзиз улы ғүмер буйы үҙенең шәхес булып формалашыуына ҙур йоғонто яһаған ике иң ғәзиз кешеһе — өләсәһе менән әсәһе хаҡында тәрән ихтирам, һағыш менән хәтергә ала. Һуғыш йылдарына тура килгән ас-яланғас балалыҡта үҙеңде үкһеҙ һәм бәхетһеҙ итеп түгел, һөйөклө һәм ҡәҙерле итеп тойорға мәжбүр иткән ғәзиз кешеләренең йылы һәм яҡты тойғолары уны һаман йылыта. Ошо мәҡәләне яҙыр алдынан Зиннур Ғәзиз улы менән осраш-

тыҡ. Уның алдында яңы ғына яҙып бөткән кескәй хикәйәһе ята ине. ”Иң бәхетле көн” тип атала ине ул. Етмеш йыл ғүмер итеп, байтаҡ илдәр гиҙгән, күренекле шәхестәр менән осрашҡан, ҙур тантаналарҙа ҡатнашҡан ғалимдың ниндәй мәлен иң бәхетле тип һанауы ҡыҙыҡ тойолдо. Ун ике йәшлек малайҙың иң беренсе тапҡыр салғы һелтәп, бесән сабырға өйрәнгәне һәм улының эшкингәнен күҙ йәштәрен һөртөп ҡарап торған әсә ҡыуанысы хаҡында ине был хикәйә.

Зиннур Ураҡсин 1935 йылдың 5 ноябрендә Ырымбур өлкәһе Төйләгән районы Мәксүт ауылында донъяға килә. Аллабирҙе ауылында ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағандан һуң Мораҡ башҡорт педагогия училищеһына уҡырға инә.

Педучилищела уҡыған ваҡытта уҡ әҙәби ижад менән мауыға, шиғырҙары, кескәй генә хикәйәләре район гәзите биттәрендә донъя күрә. Шуға күрә Башҡорт дәүләт университетына инеп, башҡорт бүлегендә уҡып сығырға дәртләнә. Әммә яҙмыш икенсерәк хәл итә. Училищены тамамлағас, тыуған ил алдындағы бурысын үтәргә Совет Армияһы сафына алына. Хеҙмәттән һуң бер йыл Федоровка районында башланғыс мәктәптә уҡыта. Икенсе йылына үҙенең тыуған яғына, Аллабирҙе ете йыллыҡ мәктәбенә эшкә ҡайта.

— Уҡытыусылыҡты ятаһам да, көслө уҡытыусы була алмаҫ инем, — тип хәтерләй ғалим ул ваҡыттарҙы. — Ылығып китеү өсөн ниҙер етмәне. Тәүҙә башланғыс мәктәптә эшләнем. Унда бөтәһе лә ябай: бала һәм уның күңеле. Шул күңел менән эшләйһең. Ете йыллыҡ мәктәптә уҡыта башлағас, миңә теләһә ниндәй фәндәрҙе бирҙеләр: черчение, тарих, физика, етмәһә пионер вожатыйы, китапханасы. Шуға күрә фәнгә китеүемә ҡыуанам. Шулай ҙа уҡытыусылыҡ аратирә төшөмә инеп ҡуя. Дәрескә әҙерләнмәй килгәнмен дә, нимә һөйләргә белмәй, ҡаушап баҫып торам, имеш.

Әмәлгә күрә, әүҙем яҙышҡан ауыл хәбәрсеһен район гәзитенә эшкә саҡыралар. Ҡышҡыһын осраҡлы ылауҙарға эләгеп, йәй көнө велосипедта, яҙлы-көҙлө юл өҙөк ваҡытта тубыҡтан бысраҡ кисеп гәзиткә материалдар йыя, ауыл хеҙмәтсәндәренең ауыр хеҙмәте хаҡында яҙа. Тормош менән яҡындан танышыу унда етди темаларға, киңерәк итеп яҙыу теләге уята, әммә ул көндән-көн белеме етмәгәнен аңлай бара. Шуға ла Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Тик үҙе ниәтләгән башҡорт бүлегенә түгел, рус бүлегенә. Шуға ҡарамаҫтан, ”Шоңҡар” әҙәби түңәрәгенә йөрөй, уның эшендә актив ҡатнашҡан егеттәр менән аралаша, ҡулъяҙма журналдарҙың барыһын да уҡып сыға. Үҙе лә ижадын дауам итә. Өсөнсө курста уҡып йөрөгәндә фән менән мауығып китә. Тәүҙә әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһынһа ла, булмышына әҙәби тәнҡит алыҫ булып тойола. Уны тел ғилеме тарта. Әлбиттә, быны бик етди сәбәбе лә бар: уҡытыусылары Талмас Мәғсүм улы Ғарипов, уның ҡатыны Нина Дмитриевна Ғарипова үткәргән дәрестәр фәндең ни тиклем ылыҡтырғыс икәнен күҙ алдына баҫтыра. Ураҡсинға айырыуса Нина Дмитриевнаның уҡытыу алымы оҡшай. Ул иң тәүҙә проблема ҡуя, уға ҡарата ниндәй ҡараштар барлығын һөйләй, һәр береһенең кәмселектәрен, өҫтөнлөктәрен һанап сыға, үҙенең фекерен белдерә, уны нигеҙләй. Студенттар уның дәрестәренән фәндең ҡатып ҡалмаған, мәңге үҫештә булған, икеләнеү, уй-

ланыу, факттарҙы сағыштырыуға ҡоролған бер мауыҡтырғыс процесс булғанын төшөнә.

”Художестволы ижад — ул фантазия, унда — рухи бәрелештәр, рухи ҡаршылыҡтар. Ә фән — ул ҡараштар, фекерҙәр бәрелеше”, — ти ғалим. Һәм ана шул көслө ағым уны үҙе артынан әйҙәй. Тәүге курстарҙа уҡ ул синонимдар менән ҡыҙыҡһына башлай. Уның мауығыуын белеп ҡалған мәшһүр ғалим Жәлил Кейекбаев студенттарҙың фәнни конференцияларына саҡыра, эҙләнеүҙәрен хуплай.

Ҡыҙыҡһыныусан студент рус теленең синонимдар һүҙлеген ентекле өйрәнә һәм башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге хаҡында уйлана. Ул арала Татарстанда Ш.Х.Ханбекованың татар теле синонимдары һүҙлеге нәшер ителә. Ураҡсин уны уҡып сығыу менән рецензия яҙа һәм ”Кызыл таң” гәзитендә баҫтырып сығара.

Егет дәртләнеп материал туплай башлай һәм был эше менән шул тиклем мауыға, хатта әҙәби китаптарҙы былай ғына, ләззәтләнеп уҡый алмаҫтай хәлгә килә, сөнки осраған бер һүҙҙең синонимдарын эҙләргә тотоноп китә. Аяҡ кейеме ҡумтаһы алып, картотека туплай. Йәйге каникулға ҡайтҡанда ҡумтаһын дөйөм ятаҡта ҡалдырмай, үҙе менән ауылға ала. Шулай итеп университетты тамамлағансы 5-6 ҡумта туплана. Лексик синонимия тураһындағы диплом эшен яҡлау менән етәксеһе Талмас Мәғсүм улы һәләтле студентын аспирантураға ҡоҙалай. Зиннур Ураҡсин Жәлил Кейекбаев менән дә кәңәшләшә һәм уның хуплауын алғас, белем алыуын дауам итә. Төҙөгән тәүге һүҙлеге аспирантурала уҡыған саҡта уҡ донъя күрә. Был, әлбиттә, ифрат ҙур ҡыуаныс була, эшендә дәрт өҫтәй. Егәрле, ныҡышмал һәм һәләтле йәш ғалим аспирантураны тамамламаҫтан алда уҡ кандидатлыҡ диссертацияһын уңышлы яҡлап та ҡуя. Бына шул ваҡыттан — 1966 йылдан алып уның яҙмышы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты менән бәйле. Тәүҙә ул бында лаборант, кесе ғилми хеҙмәткәр булып эшләй башлай һәм артабан директор дәрәжәһенә тиклем күтәрелә.

Зиннур Ғәзиз улының эҙләнеү һәм тикшеренеү даирәһе ифрат киң: лексикология, фразеология, төрки телдәрҙең грамматик төҙөлөшө, социолингвистика, ономастика һәм башҡалар. Ул төрки телдәр фразеологияһы теорияһына айырыуса ҙур өлөш индерҙе, төрлө һүҙлектәр төҙөүҙең принциптарын эшләне. Уның авторлығында һәм яуаплы мөхәррир булараҡ ҡатнашлығында ике тиҫтәнән ашыу һүҙлек әҙерләнде һәм нәшер ителде.

— Ике ижад ғүмер буйы мине үҙенә тартты. Әҙәбиәт һәм фән. Күптән түгел генә мәрхүм булған күренекле ғалим Раил Кузеев фәнде татлы каторга, тип әйтергә ярата торғайны. Ысынлап та, фән илһамды ғына көтөп тормай. Ул — ныҡышмалылыҡ талап иткән, төпкә егелеп тарта торған хеҙмәт. Теләйһеңме, теләмәйһеңме, эш урыныңа барып ултыраһың да эшләргә тотонаһың. Иң тәүҙә материал туплайһың. Шунан ул проблема буйынса яҙылған бихисап мәҡәләләр, китаптар уҡыйһың, фекер йөрөтәһең: дөрөҫмө был, һинең уйлағандарыңа тап киләме, тулымы, түгелме? Йыйған материалың менән сағыштырып, үҙеңдән бер концепция сығараһың, — ти ғалим. Һүҙлектәр менән эшләгән саҡта ул фразеология менән мауығып китә, уға докторлыҡ диссертацияһын арнай һәм күп тә үтмәй уңышлы яҡлай.

Ошо йылдар дауамында ул ғилми хеҙмәтте етәкселек менән яраштырып алып бара. 1969 йылдан башлап сектор бүлеге мөдире була, 1978 йылда институт директорының фән буйынса урынбаҫары итеп үрләтелә, ә 1988 йылдан 2002 йылға тиклем директор булып эшләй. Вазифаһы буйынса ул гуманитар фәндәр һәм айырыуса филология буйынса алып барылған һәм барыласаҡ тикшеренеүҙәрҙең төп йүнәлешен билдәләүҙә ҡатнаша, бик күп халыҡ-ара форумдарҙа сығыш яһай.

Етәкселектә, әлбиттә, кешеләр менән мөғәмәлә итә белеү, эште дөрөҫ ойоштороу мөһим. Тап бына шул саҡта үҙеңдең дә шәхсән сифаттарың, күңел киңлегең, башҡаларҙы аңлау һәләтең тулыһынса асыла. Шөкөр, Зиннур Ғәзиз улы был һынауҙы ла уңышлы үтә һәм коллегаларының тотороҡло ихтирамын яулай.

— Ғалимдар менән етәкселек итеү ҡатмарлы, шул уҡ ваҡытта ифрат мауыҡтырғыс. Бында һәр береһе үҙ фекере, үҙ ҡарашы булған үҙенсәлекле шәхес. Уларға баҫым яһап, авторитар юл менән етәкселек итеү мөмкин түгел. Әйткәндәрең дәлилле, уйланылған булырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта фәндә үҙеңдең абруйың булыуы мөһим, — ти Зиннур Ғәзиз улы. — Директор булып ултырған сағымда кешене кабинетҡа саҡырып һөйләшергә һис тә яратмай торғайным. Үҙем инәм, эш шарттарын, нимәгә мохтаж икәнен дә күрәм. Тәжрибә артҡан һайын, кешенең кәйефен ҡарашынан уҡ күрергә өйрәнәһең. Шунһыҙ булмай. Йәнә лә, ихлас булырға тырышырға кәрәк. Йәштәргә лә шулай өйрәтәм. Үҙ фекереңде йәшереп ҡалдырырға ярамай. Ғалим фекер алышҡан, бәхәсләшкән саҡта үҫә, тик объектив булырға һәм дөйөм мәнфәғәттәрҙе, фәнде алғы планға ҡуйырға кәрәк.

Зиннур Ғәзиз улына институт, ғөмүмән, фән өсөн бик ҡатмарлы йылдарҙа директор булып эшләргә тура килә. Белеүебеҙсә, үткән быуаттың 90-сы йылдарында уйланылмаған реформалар һәм үҙгәртеп ҡороуҙар илебеҙ фәненең бәкәленә бик ныҡ һуҡты. Финанслау ҡырҡа кәмене, ҡайһы берәүҙәр, фән үҙенең тамағын үҙе туйҙырырға тейеш, тигән талаптар ҡуя башланы. Бик күп тармаҡ институттар хужаһыҙ ҡалып тарҡалды. Был шауҡым беҙҙең республиканы ла урап үтмәне.

— Хатта институттың юҡҡа сығыу ихтималы ла бар ине, — тип иҫкә ала ул саҡтарҙы ғалим. — Сөнки институт һынлы институт ябылһа ла, бер кем, нишләп яптығыҙ, тип әйтмәҫ ине. Бөтөнләй тиерлек аҡса бүленмәй башланы һәм матди яҡтан әйтеп биргеһеҙ ауыр көндәр килде. Әммә шул осорҙа, бәхеткә күрә, милли хәрәкәт көсәйеп китте һәм республикаларҙа милли академиялар ойошторола башланы. Беҙ ҙә, егерме ғалимдан торған ойоштороу комитеты төҙөп, академия юлланыҡ.

1991 йылдың 6 февралендә Башҡортостандың Юғары Советы Президиумы Указы менән Башҡортостан Фәндәр академияһы ойошторола. Академия эшләй башлағас, институтҡа ла өҫтәмә финанс килә. Шулай итеп бер генә хеҙмәткәрҙе лә ҡыҫҡартмаҫҡа мөмкинлек тыуа. Һәр кем үҙ урынында ҡала. Әммә ҡайһы бер ҡайнар баштар Зиннур Ураҡсинды милли патриотлыҡ юҡлыҡта ғәйепләй башлай. ”Ниңә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтын башҡорт академияһына күсермәйһең?” — тигән дәғүә ҡуялар. Әммә ул, фәндә тармаҡ буйһоноуы мөһим түгел, тигән фекерҙә тора һәм ҡарашын: ”Рәсәй фәндәр академияһына ҡарайбыҙ икән, унан да аҙмы-күпме аҡса алабыҙ. Был

иһә ҡалдыҡ принцип менән тәьмин ителгән фән өсөн һис тә насар түгел", — тип дәлилләй. Ураҡсиндың ул саҡта хаҡ булғанын тормош әле килеп үҙе раҫланы.

— Яңынан үҙәкләштереү процесы башланғас, Башҡортостан бюджетының бик күп өлөшө Мәскәүгә оҙатыла. Шул сәбәпле, Мәскәүгә ҡараған учреждениеларҙы финанслау яҡшыра. Әгәр ҙә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты теге мәлдә Башҡортостан ҡарамағына күскән булһа, әле республиканың әҙ-мәҙ генә финансын таларға мәжбүр булыр ине. Ҙур дәүләт эсендә йәшәйбеҙ икән, уға яраҡлашырға тура килә, — тип иҫәпләй Зиннур Ғәзиз улы. — Институтты һаҡлап ҡалыу өсөн дөрөҫ йүнәлеш һайланған булған.

Телсе ғалим булараҡ, Зиннур Ураҡсин мәғрифәт өлкәһендә әүҙем эшләй, дәреслектәр әҙерләүҙә ҡатнаша, фәнни-популяр китаптар һәм мәҡәләләр яҙа. Башҡорт дәүләт университеты, Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогика академияһы һәм башҡа юғары уҡыу йорттарында, Төркиә, Германия университеттары студенттарына лекциялар уҡый.

— Мин үҙем йәштәр менән бик ныҡ эшләгән абруйлы ғалимдарҙа уҡыным. И.П.Распопов, Л.М.Васильев, Т.М.Ғарипов, Ж.Ғ.Кейекбаев кеүек мәшһүр телселәрҙе остаздарым тип иҫәпләйем. Бигерәк тә Жәлил ағай, ниндәй генә бүлектә уҡыуҙарына ҡарамаҫтан, рус бүлегендәме, инглизмы, башҡорт егеттәренә иғтибарлы булды, һәләтеңде абайлап ҡалһа, үҙ тирәһенә ылыҡтырырға тырышты. "Һин нимә эшләйһең әле, мырҙам?" — тиер ине. Гел фән тураһында уйланы. Рус бүлеген тамамлаһам да, аспирант ваҡытта ул миңә рус һәм башҡорт телдәренең сағыштырма грамматикаһын уҡытырға дәрестәр бирә торғайны. Аҙыраҡ ситләшеп киткәйнем, бер ваҡыт: "Аҡылы бар кеше профессор тирәһенә туплана торғайны. Һин ҡайҙа йөрөп ятаһың?" — тип тотоп әрләне.

Ураҡсин үҙе лә йәштәр менән аралашырға ярата. Кадрҙар менән эшләүгә ҙур иғтибар бирә һәм быны бик мөһим мәсьәлә, тип иҫәпләй. Ун туғыҙ кеше уның етәкселегендә кандидатлыҡ, ерәү докторлыҡ диссертацияһы яҡлаған. Тағы бер уҡыусыһы докторлыҡ диссертацияһы әҙерләй. Шәкерттәренең күбеһе вуздарҙа эшләй. Әле алты аспиранты бар. Йәштәргә фәнде яратырға өйрәтеүҙә, ғүмерҙәре буйы уға тоғро хеҙмәт итергә һәләтле ғалимдар әҙерләүҙә күрә ул үҙ бурысын.

— Йәштәр күбеһе сит тел белеп, компьютер менән эшләргә өйрәнеп, бик әҙерлекле килә. Был бик ҡыуаныслы. Әммә фәндә аҡса самалы, шуға күрә ғүмерлек эшең итеп һайлар өсөн уны бик яратырға кәрәк. Әле кесе ғилми хеҙмәткәр 3 мең, өлкәне 4 мең һум хеҙмәт хаҡы ала. Хәҙерге заманда был эш хаҡымы ни? — тип борсола ул.

З.Ғ.Ураҡсин йәмәғәт эшмәкәре булараҡ та киң танылған. Ул оҙаҡ йылдар "Советская тюркология" Бөтә Союз фәнни-теоретик журналы мөхәрририәте ағзаһы булды, СССР Фәндәр академияһының Әҙәбиәт һәм тел бүлегенә ҡараған Тюркологтар комитеты эшендә ҡатнашты, сирек быуат буйы Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы янындағы Терминология комиссияһында эшләне. БР Фәндәр академияһы вице-президенты, БР Президент Советы ағзаһы (1994—2004), БР Министрҙар Кабинеты эргәһендәге ЮНЕСКО эштәре буйынса Комитет ағзаһы (1998—2004), "Башҡортостан Респуб-

ликаһы халыҡтары телдәре тураһында” законды ғәмәлгә ашырыу комиссияһы рәйесе урынбаҫары булараҡ, төбәк, хатта халыҡ-ара масштабтағы мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ҡатнашырға тура килә уға.

Зиннур Ураҡсин ҡатнашлығында дәүләт кимәлендәге бик мөһим программалар эшләнә һәм хөкүмәт тарафынан раҫлана. Программа фәндең теге йәки был өлкәһендәге сәйәсәтте билдәләй, уның артабанғы үҫеш йүнәлешен аныҡлай һәм төп проблемаларҙы ҡуя. Алдан төҙөлгән программа буйынса эшләү, тик уға төбәп аҡса бүлеү — сит илдән алынған тәжрибә. Америкала, мәҫәлән, беҙҙәге кеүек тотош финанслау юҡ. Программа төҙөлә һәм ул аҡыллы, файҙалы һәм эшлекле икән, етерлек кимәлдә финанслана.

— Мәҫәлән, беҙ ”Башҡортостан халыҡтары” программаһын эшләнек. Китап сыҡты, программала ҡуйылған маҡсаттарҙың күбеһе тормошҡа ашырылды. ”Башҡортостан халыҡтары телдәре” тигән программа, закон эшләнек. Шул айҡанлы күпме файҙалы эштәр бойомға ашырыла. Һуңғы осорҙа нәшер ителгән әллә нисәмә һүҙлек тап ошо дәүләт программаһы нигеҙендә донъя күрҙе. Бындай баҫмаларҙың титул битенә ”БР халыҡтары телдәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү дәүләт программаһы рамкаһында ғәмәлгә ашырылды” тип яҙылған, — ти Зиннур Ғәзиз улы.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары булараҡ та З.Ғ.Ураҡсин башҡорт халҡының мәҙәниәте, теленең үҫеше өсөн байтаҡ эштәр башҡарҙы. Уның етәкселегендә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы тарафынан раҫланған ”Башҡорт халҡының яңырыуы һәм үҫеше” дәүләт программаһы һәм ”Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” законды ғәмәлгә ашырыу программаһы эшләнде.

Ғилми эҙләнеүҙәр, тынғыһыҙ йәмәғәт эшмәкәрлеге Зиннур Ураҡсиндың әҙәбиәткә ынтылышына бер ваҡытта ла ҡамасаулай алманы. Ул ғүмере буйы яратҡан шөғөлөнә, әҙәби ижадҡа тоғролоҡ һаҡланы. Башта ул уймаҡ хикәйәләр авторы булараҡ танылды. Тәжрибә туплана, ваҡыт үтә барыу менән хикәйәләр, повестар яҙҙы. 2003 йылда ”Ағиҙел” журналы уның тәүге ҙур күләмле әҫәре — ”Ҡарат” романын уҡыусылар хөкөмөнә тәҡдим итте. Тиҙ арала уның Марсель Ғәфүров тарафынан тәржемә ителеүе һәм ”Бельские просторы” журналында донъя күреүе әҫәрҙең йәмәғәтселек тарафынан йылы ҡабул ителеүе хаҡында һөйләй. Әле ғалим һәм әҙип бәләкәй ҡалаларҙың проблемаларын яҡтыртҡан ”Бәҡыртау” повесын тамамлай. Әммә һуңғы йылдарҙа ижадҡа ваҡытын күберәк бүлһә лә, төп даирәһе, әлбиттә, фән булып ҡала.

— Әгәр ҙә бөтәһен дә яңынан башларға тура килһә, һеҙ нимә менән шөғөлләнер инегеҙ, — тип һораным әңгәмәне йомғаҡлар алдынан.

— Фән менән, — тине ул, байтаҡ уйланып ултырғас. — Шул уҡ лексикология һәм фразеология йүнәлештәрен һайлар инем һәм, моғайын, этимологияға тотонор инем. Сөнки беҙҙең башҡорт тел белемендә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, этимология артта ҡалып килә. Һүҙҙәрҙең килеп сығышы тел ғилемендә иң мөһим аспекттарҙың береһе. Ж.Кейекбаев тикшерҙе, әлбиттә, әммә ул алтай, фин-уғыр телдәренә, ситкәрәк сығып китте. Бары төрки телдәрҙең, башҡорт

теленең генә этимологик һүҙлеген сығарғанда һәйбәт булыр ине. Был саҡта халыҡтың тел ғилемендәге мәғлүмәте байтаҡ күтәрелер ине, юғиһә һуңғы йылдарҙа төрлөсә уйлап сығарыуҙар артыҡ күбәйеп китте.

"Диалектология" һүҙлеге, ғилми грамматика эшләнек. Ул 1981 йылда донъя күрҙе. Уны, яңы теорияларҙы файҙаланып, яңынан баҫып сығарыу яҡшы булыр ине. Хәҙер грамматикала семантик элемент көсәйҙе. Элек башлыса форма һәм категорияға иғтибар көслө булһа, хәҙер мәғәнә менән бәйләнештә, йәғни фекер йөрөтөүгә бәйләп эшләйҙәр. Ә беҙҙең башҡорт телендә логика бик көслө. Бында иһә халыҡтың фекер йөрөтөү ҡеүәһе күренә. Шуларҙы тәфсилләберәк өйрәнеү маҡсатҡа ярашлы булыр ине.

Ғүмерлек мөхәббәте — әсә теле хаҡында ғалим сәғәттәр буйы һөйләргә әҙер. Йылдар ҙа, тормош юлында осраған һынауҙар ҙа, вазифа һәм дәрәжәләр ҙә уны үҙгәртмәгән, тормоштан, кешеләрҙән биҙҙермәгән.

Зиннур Ғәзиз улы үҙен ғаиләһендә лә бәхетле кеше тип иҫәпләй. Күгәрсен районы Түңгәүер ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуып үҫкән тормош юлдашы Венера Заһит ҡыҙы ғүмерен балалар уҡытыуға бағышлай. Йәштәр Мораҡ педучилищеһында, артабан БДУ-ла бер осорҙа уҡый һәм студент йылдарында уҡ ғаилә ҡора.

— Венера бик яҡшы тормош иптәше булып сыҡты. Тыныс, ғаиләгә тоғро, өйҙә юҡ-бар мәшәҡәт тыуҙырмай, эшемде һәр саҡ хуп күрә, ифрат иғтибарлы, — ти З.Ураҡсин.

Ике балалары — ҡыҙҙары Зилә менән улдары Юлдаш студент йылдарында уҡ донъяға килә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Венера Заһит ҡыҙы уҡыуына зыян килтермәй, көндөҙгө бүлекте уңышлы тамамлай.

Эшсән, тормош уртаһында ҡайнап, халыҡ мәнфәғәтен хәстәрләп йәшәгән ғаиләлә үҫкән балалар үҙҙәре лә уңған. Зилә БДУ-ның физика-математика факультетын тамамлаған, әле Һаҡлыҡ банкыһында эшләй. Эшен бик ярата. Уның улы авиация институтында уҡый.

Атаһы БДУ-ның география факультетын тамамлаған улы Юлдаштың фән юлынан китеүен бик теләй. Әммә ул үҙ юлын һайлай. Әле Юлдаш Зиннур улы Башҡортостан Республикаһы хөкүмәте эргәһендәге Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡта рәйес урынбаҫары булып эшләй. Ике улы үҫә. Береһе нефть институты студенты, ә кесеһенә бер йәш кенә әле.

— Юлдаш эшен бик ярата, мауығып эшләй. Минең менән йыш кәңәшләшә, — ти Зиннур Ғәзиз улы. — Әлбиттә, был атай кеше өсөн бик ҡыуаныслы. Минең уға ярҙам итерлек эш һәм тормош тәжрибәм етерлек. Ғөмүмән, балалар кеселекле, ихтирамлы, туған йәнле булып үҫте. Бәләкәйҙән ауылға барып, нәҫел-нәсәп менән аралашып йәшәүгә күнеккәндәр.

Тормоштоң йәме — татыулыҡта, тәм табып, халҡыңа хеҙмәт итеп, үҙеңде файҙалы тойоп йәшәүҙә. Етмеш йәшлек юбилейын билдәләгән көндәрҙә танылған ғалим ҙур ҡәнәғәтлек, пак намыҫ менән шулай тип тағы бер тапҡыр тулы ышаныс менән раҫлай ала, сөнки ғүмере шуға дәлил.